## 36 – сы практик эш

**Темаһы:** Өфө – минең тыуған ҡалам. Уфа – мой родной город.

**Башҡарылаcаҡ эш төрҙәре:** сифаттарҙы ҡулланыу, уларҙың дәрәжәһен барлыҡҡа килтереү, һөйләм һәм текст тәржемә итеү буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на применение прилагательных, образование степеней сравнения, перевод текстов и предложений по теме.

**Маҡсат:** сифаттарҙы ҡулланыу, уларҙың дәрәжәләрен барлыҡҡа килтереү, текст тәржемә итеү буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Цель:** формирование умений и навыков по применению имен прилагательных, образованию степеней сравнения, чтение и перевод предложений и текстов по теме.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

### Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.
2.Эш урынын тәртиптә тоторға.
3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

### Инеш инструктаж (письменно)

**1.Һүҙлек эше:** текә сағыл – крутой косогор яр башында – на берегу
мәңгелек – вечный мөһабәт – могущественный Дим йылғаһы - Дема
боронғо – древни, старинный Имән ҡала – дубовый город
Ағиҙел буйында – на берегу Белой юғары уҡыу йорто - вуз
Тыуған яҡты өйрәнеү музейы – краеведческий музей баш ҡала – столица
һәйкәл – памятник таҡыр – гладкий, ровный арналған - посвящен

**2. Сифат – имя прилагательное** обозначает признак предмета и отвечает на вопрос: **ниндәй** (какой?)

| № | Сифат дәрәжәләре (степени сравнения прилагательных) | Яһалышы (образование) | Миҫалдар (примеры) |
|---|---|---|---|
| 1 | Төп дәрәжә (положительная степень) | - | матур (красивый), аҡ (белый) |
| 2 | Сағыштырыу дәрәжәһе (сравнительная степень) | - **раҡ, - рәк**<br>- **ыраҡ, - ерәк**<br>- **ораҡ, - өрәк** | матур**ыраҡ (красивее)**, ағ**ыраҡ (белее)** |
| 3 | Артыҡлыҡ дәрәжәһе (превосходная степень) | 1. добавление - **м** или – **п** к первому слогу<br>2.добавление усилительных частиц: **иң** – самый, **бик, бигерәк** – очень, **ғәжәп** - | ма**п** – матур (красивый-красивый)<br>**бик** матур – (очень красивый) |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | слишком | а**п** – аҡ – белый – белый, **бик** аҡ – очень белый |
| 4 | Аҙһытыу дәрәжәһе (уменьшительная степень) | **ҡына , кенә, ғыны, генә** | матур **ғына** – красивенький, аҡ **ҡына** - беленький |

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге (Содержание и последовательность выполнения работы):**

**1-се бирем**. Вариантлап эшләү1. Тексты уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ (Прочитайте текст, переведите) 2.Сифаттарҙы күсереп алығыҙ (Выпишите прилагательные из текста):

**1 – се вариант:** Өфө – беҙҙең баш ҡалабыҙ

Башҡортостандың баш ҡалаһы – Өфө. Өфө ҡалаһы Ағиҙел буйында бейек тауҙа урынлашҡан. Яр башында ике мөһабәт һәйкәл тора. Бер һәйкәл башҡорт һәм рус халҡының мәңгелек дуҫлығын данлай, икенсеһе – Салауат Юлаевҡа ҡуйылған. Салауат батыр текә сағылда ат өҫтөндә илен һаҡлап тора.

Башҡортостандың баш ҡалаһы бик матур: йорттары бейек, күп ҡатлы, урамдары киң, юлдары таҡыр. Йәшел урамдарҙа автобустар, троллейбустар, трамвайҙар йөрөй. Өфө ҡалаһы йылдан – йыл матурлана, үҫә.

**2 – се вариант:** Өфө ҡалаһы

Өфө ҡалаһы – боронғо ҡала. Элек башҡорттар уны Имәнҡала тип атаған. Ҡалала Тыуған яҡты өйрәнеү музейы, М.В.Нестеров исемендәге художество музейы, халыҡ шағиры М.Ғафуриҙың йорт – музейы бар. Унда бик күп театр эшләй, ундан ашыу юғары уҡыу йорто бар, колледждар, мәктәптәр бик күп.

Ағиҙел ярының иң бейек урынында Салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡуйылған. Дуҫлыҡ монументы бар. Был һәйкәл рус һәм башҡорт халыҡтарының дуҫлығына арналған.

**2 –се бирем.** Диалогты нөктәләр урынына кәрәкле хәрефтәр ҡуйып күсереп яҙығыҙ **(**Спишите диалог, поставив вместо точек нужные буквы**)**:

- Өф...гә һеҙ ҡ...сан килдегеҙ?
- К...сә.
- Оҙаҡҡамы?
- Юҡ, ирт...гә ҡайтабыҙ? Тиҙерәк Өф... менән танышҡым килә.
- Музейҙ...рға барығыҙ!
- Нинд...й?

- Археология һ...м этнография музейы, Тыуғ...н яҡты өйрәнеү музейы, М.В. Нестеров ис...мендәге художество музейы
- Ярай, м...н к...ттем, тиҙерәк танышҡым килә!
- Ярай, күң...лле экскурсия!

**3 - сө бирем. Вариантлап эшләү.** Бирелгән сифаттарҙан дәрәжәләр барлыҡҡа килтерегеҙ (Образуйте степени имен прилагательных **с использованием окончаний из вводного инструктажа**):

**1 – се вариант:** яҡшы, тәмле **2 – се вариант:** ҡыҙыл, зәңгәр

Төп дәрәжә**:** аҡыллы (умный)

Сағыштырыу дәрәжәһе: аҡыллы**раҡ** (умнее)

Артыҡлыҡ дәрәжәһе: **ап** – аҡыллы (умный – умный), **бик** аҡыллы (очень умный)

Аҙһытыу дәрәжәһе: аҡыллы **ғына** (умненький)

**4-се бирем.** Иҫтәлекле даталарҙы күсереп яҙығыҙ (Спишите памятные даты):

1922 йыл – баш ҡала Стәрлетамаҡтан Өфөгә күсә.

1910 йыл – Өфө ҡалаһында 400 –гә яҡын извозчик була.

1924 йыл – Өфө урамдарында автобустар күренә башлай.

1937 йыл – ҡалала трамвай йөрөй башлай.

1962 йыл - троллейбустар линияһы асыла.

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуң студент**

**белергә тейеш:** сифаттарҙың дәрәжә формаларын, дәрестә ҡулланылған лексиканы, **барлыҡҡа килтерә һәм ҡуллана белергә тейеш:** сифаттарҙың дәрәжә формаларын, һөйләмдәрҙе, текстарҙы төҙөү, тәржемә итеү.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1. Һорауҙарға яуап бирегеҙ (Ответьте на вопросы – можете ответить на русском языке): В каком году была построена крепость Уфа? В каком году получает статус города? Как раньше называли Уфу?

**Өйҙә эшләү өсөн биремдәр:** Л1. 144-146 – сы биттәр, тыуған ҡала тураһында текст төҙөргә (составить текст о родном городе ( селе).

Уҡытыусы _______ Мөхөтдинова .Ф.Р.